**Башҡорт халыҡ шағиры Мостай Кәримдең тормош һәм ижад юлын өйрәнеү.**





# Мостай Кәримдең үҫмер һәм бала сағы

Мостафа Сафа улы Кәримов (Мостай Кәрим) 1919 йылдың 20 октябрендә Башҡортостан Республикаһының Шишмә районы Келәш ауылында крәҫтиән ғаиләһендә донъяға килә. Үҙенең шиғырҙарын буласаҡ шағир алтынсы класта яҙа башлай. 16 йәшендә тәүге шиғырҙар йыйынтығын баҫтыра.



# Белем һәм тормош баҫҡыстары

1935 йылда К. А. Тимирязев исемендәге Башҡорт педагогия институтының тел һәм әҙәбиәт факультетына уҡырға инә, уны 1941 йылда тамамлай.







Институтты тамамлағандан һуң Ҡыҙыл Армия сафына саҡырыла һәм Муром элемтә училищеһына йүнәлтмә ала.

1942 йылдың майында кесе лейтенант вазифаһында 17 -се мотоуҡсылар бригадаһына артдивизиондың элемтә начальнигы итеп ебәрелә.

1942 йылдың августында ҡаты йәрәхәтләнә, ярты йыл тирәһе госпиталдә дауалана. Һауыҡып сыҡҡас, Воронеж фронтының «За честь Родины» һәм 3-сө Украина фронтының «Советский воин» гәзиттәрендә хәбәрсе булып эшләй. Еңеүҙе Венала ҡаршы ала. Был һуғыш тураһында һуңынан ул бик күп яҙа. Мина ярсығы күкрәгенә инеп, йөрәгенә саҡ ҡына барып етмәй ҡала. Госпиталдә ятып дауаланып сыҡҡас, йәнә фронтҡа китә һәм фронт гәзиттәрендә хәбәрсе булып эшләй.


СОВЕТСКИЙ ВОИН
ВЫСОКАЯ НАГРАДА ВДОХНОВЛЯ
НАШ ОТВЕТ—УДАРНЫЙ РАТНЫЙ ТРУД







Башҡортостан - гүзәл республика! Бормаланып аҡҡан Ағиҙел һәм Дим йылғалары, сал Урал буйҙары, алтын иген баҫыуҙары, ер аҫты ҡаҙылма байлыҡтары булған данлы республика. Әйтерһең дә тәбиғәттең бөтә байлығы, йомартлығы ошо беҙҙең Башҡортостаныбыҙға күскән. Ошо бай, бәрәкәтле ерҙән ниндәй генә шәхестәр үҫеп сыҡмаған да , ниндәй генә аҡыл эйәләре көс һәм ғәйрәт алмаған.

Башҡортостандың аҡһаҡалы, халыҡ шағиры Мостай Кәримдең дә тормошо, бала сағы, уҡыу йылдары, ижады ошо ер менән бәйле.



“Оҙон-оҙаҡ
бала саҡ”









# Һуғыш йылдары осорондағы ижады

Мостай Кәрим Бөйөк Ватан һуғышының башынан аҙағына тиклем яу юлдарын үтә.



Мустай Карим. Фото 6 мая 1942 г.



Мустай Карим - сотрудник фронтовой газеты «Советский воин». Фото 1945 г.

“Өсөнсө көн тоташ ҡар яуа”



# Китаптар күргәҙмәһе


















# М.Кәрим – балалар яҙыусыһы

















# Ҙур хеҙмәткә-ҙур хөрмәт

“Эйе, уңдым.  Күп нәмәнән уңдым.
Минән уңды
микән бүтәндәр?”- тигән һорау ҡуя. Эйе, башҡалар ҙа бик уңды. М. Кәримдең ошо өлкәне, тормош юлын дөрөҫ һайлауы, халыҡтарҙы бер-берейһенә яҡынайтырға тырышыуы, кешеләр күңелендә яҙҙар уятыуы менән халыҡтар, кешелек  уңды.

Башҡортостан үҙ улын игелекле һәм итәғәтле итеп үҫтерһә, М.Кәрим үҙ сиратында үҙ республикаһының халҡы исемен тағы ла юғарыраҡ күтәрҙе, башҡорт әҙәбиәтенең ил күләмендәге дәрәжәһен нығытты. Унық әҫәрҙәре рус, украин, ҡаҙаҡ, латыш, литва һәм башҡа телдәргә тәржемә ителде.



# Тест һорауҙары

Башҡортостандың халыҡ шағиры М.Кәримдең тормош юлы һәм ижады тураһында алған белемдәребеҙҙе йомғаҡлап, дәрес аҙағында тест һорауҙарына яуап бирәбеҙ.

1.М.Кәримдең тәүге шиғырҙар китабы нисек атала?
а) “Өс таған”
б) “Отряд ҡуҙғалды»



2. “Дуҫтың үлеме” шиғыры ҡасан яҙылған?
а) 1945
б) 1938

3. Шағир ҡайһы районда тыуған?

а) Ғафури районынында

б) Шишмә районында



4. ”Ер шарының картаһына
Ҡараһаң яҡшы ғына-
Башҡортостан шул картала
Бер япраҡ саҡлы ғына”.

Был өҙөк ҡайһы шиғырынан?

а) “Россиянмын”

б) “Ҡайын япрағы тураһында”.

5. М.Кәримдең проза әҫәрен билдәлә.

а) “Мин фронтҡа китәм, иптәштәр!”

б) “Беҙҙең өйҙөң йәме”.

6. “Мин фронтҡа китәм, иптәштәр!”шиғыры ҡасан яҙылған?

а) 1938

б) 1941



Әҙәбиәтебеҙҙе үҫтереүгә күп көс һалған аҡһаҡалыбыҙ, шәхесебеҙ  күңел һәм йөрәк түрендә һәр саҡ һаҡланыр.
М.Кәримдең исемен мәңгелләштереү буйынса бик күп эштәр башҡарылды.
Өфөлә милли йәштәр театры М.Кәрим исемен йөрөтә, М. Кәрим урамы булдырылды,
158-се башҡорт лицейы уның исемен йөрөтә, профсоюздар йорто алдында халыҡ шағирына һәйкәл ҡуйылды,
Мәсетле районында М.Кәримгә һәйкәл асылған (1989 йылда- шағир үҙе иҫән саҡта).


Башкирская Гимназия №158 им. М.Карима




МУСТАЙ КАРИМ


Молодежный Театр

# Ихтибарығыҙ өсөн рәхмәт !